# *Башҡорт теле*

*3 синыф*

*Дәрес темаһы: Йәшелсә, еләк-емеш.*
*Һин нимә ашайһың? һорауы.*

*Маҡсаты: 1. Йәшелсә, еләк-емеш исемдәрен белдергән һүҙҙәр менән танышыуҙы дауам итеү, укыусыларҙа хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү*
*2. Нимә ашайһың? һорауына яуап бирергә өйрәтеү, бәйләнешле телмәр үҫтереү, укыусыларҙың телмәр һәләтлеген үҫтереү, һүҙлек запасын байытыу.*
*3. Тыуған ергә, тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү.*
*Йыһазландырыу : Йәшелсә, еләк-емеш һүрәттәре, муляждар плакаттар, ҡурсаҡ, магнитофон, китап «Башҡорт теле».*

## *Дәрес барышы:*

*I. Ойоштороу мәле.*

*1. Уҡытыусы менән танышыу.*

*- Һаумыһығыҙ! Таныш булайыҡ. Мин Тукбаева Эльмира Рәфис ҡыҙы буламын. Бөгөн һеҙҙең класта дәрес үткәрәм.*
*- Гөлназ менән танышыу.*
*- Шулай уҡ беҙгә Гөлназ тигән курсаҡ та килгән. Әйҙәгеҙ, уның менән танышып китәйек. Башҡорттарҙа шундай күрешеү йолаһы бар, Гөлназ һеҙҙән исемдәрегеҙҙе һорар, ә һеҙ уның менән күрешеп яуап бирерһегеҙ. Сығып, һәр берегеҙ ҡурсаҡ менән күрешеп, исемдәрен әйтәләр.*
*Ҡурсаҡ: - Минең исемем Гөлназ, ә һинең исемең кем?*
*Уҡытыусы: - Минең исемем Радик.*

- *Гөлназ һеҙҙең эшләгәнегеҙҙе ҡарап ултырасаҡ. Кем яҡшы, иғтибарлы ҡыҙ, малай икән был класта?*

*Дәрестең маҡсатын ҡуйыу.*
*а) – Беҙ бөгөн һеҙҙең менән еләк – емеш, йәшелсә исемдәрен белдергән һүҙҙәр менән танышыуҙы дауам итәбеҙ. Шулай уҡ “Нимә ашайһың?" һорауына яуап бирергә өйрәнәсәкбеҙ китап менән эшләрбеҙ, дәфтәргә яҙырбыҙ, уйнап алырбыҙ, йырларбыҙ.*

*б). – Хәзер дәфтәрҙәрҙе асығыҙ, бөгөнгө числоны, дәрестең темаһын яҙып ҡуябыҙ.*

*Ун алтынсы декабрь.*

*Синыфта эш.*

*Йәшелсә, еләк – емеш.*

*Һин нимә ашайһың?*

*Фонетик – орфоэпик күнегеү.*

*плакаттан тел шымарткыс уҡыу.*

*Уҡытыусы: - Әйҙәгеҙ, дәрес алдынан телде яҙҙырып алайыҡ. Плакаттағы тел шымартҡысты уҡып китәйек.*

*а) тел шымартҡысты мин уҡыйым.*

*Бигерәк уңған сөгөлдөр,*
*Атай сәскән өсөндөр.*

*б) хор менән уҡыу.*

*Уҡытыусы: - Кем русса әйтә, нисек был тел шымартҡыс русса тәржемә ителә?*

*Свекла уродилась,*
*Потому что папа посадил.*

*в) Һорауҙарға яуап биреү.*

*- Ҡарағыҙ әле, был һеҙҙең баҡса. Баҡса ниндәй? – Баҡса ҙур, матур.*

*- Баҡсала нимәләр үҫә? – Баксала ҡыяр, помидор, кишер,һуған үҫә. Һүрәттән күрһәтеү.*

*- Баҡсала кемдәр эшләй? – Баҡсала атай , әсәй, өләсәй ,мин, малай, ҡыҙ эшләй .Һүрәттән күрһәтеү.*

*- Кемдең ата - әсәһе баҡсасы? Кемдең атаһы, әсәһе баҡса үҫтерә?*

*г) Һүрәттәр аша һығымта яһау.*

*- Эйе, дөрөҫ баҡсала бергә, ғаилә менән бергәләп эшләгәндә генә яҡшы уңыш алып була. Был һүрәттә ҡарағыҙ әле сөгөлдөр, кишер уңған, бәрәңге уңған,ҡ ыяр, помидор уңған. Беҙҙе ер ашата, туйҙыра, шуның өсөн беҙ үҙ еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе яратырға, уны һаҡларға тейешбеҙ.*

*Башҡорт халҡында шундай мәҡәл бар "Берҙәмлектә-көс". Эште бергә эшләгәндә генә эш уңа. Был һүрәттә балалар бергә, тырышып эшләйҙәр.*

*Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.*

*д) Кәрзин менән эш , тактаға сығып, кәрзингә һалыу.*

*Уҡытыусы: - Ә хәҙер таҡтаға ҡарайыҡ әле. Бында беҙ ике кәрзин күрәбеҙ. Ошо кәрзиндәрҙе тултырырға кәрәк.*

*Уҡытыусы: - Айнур, был нимә? Ҡайһы кәрзингә һалабыҙ? Алма ниндәй?*
*Айнур: - Был алма. Алма ҡыҙыл, тәмле.*
*Уҡытыусы: - Радик, был нимә? Сөгөлдөр ниндәй?*
*- Саша, был нимә? Грушаны күрһәтәм.*
*- Игорь, был нимә? Ҡыярҙы күрһәтәм.*
*- Диана, был нимә? Сейәне күрһәтәм.*
*Уҡытыусы: - Тимәк, алма, груша,сейә, слива – былар нимәләр инде? Кәрзинде күрһәтәм.*
*Балалар: - Былар – емештәр.*
*Уҡытыусы: - Ә сөгөлдөр,ҡыяр, кәбеҫтә - нимәләр?*

- *Былар – йәшелсәләр.*
- *Ярай, һәйбәт, молодцы.*

*ж) Күплек ялғауҙарын ҡабатлау.*
*з) Йәшелсә, һүрәттәре менән эш.*
*Бер – помидор, күп – помидорҙар*
*кишер – кишерҙәр.*
*к) Карточка менән эш.*
*- Ә хәҙер бында ҡарағыҙ әле Карточка күрһәтәм.*
*Бер булһа ҡыяр, күп булһа нимә була? Ҡыярҙар.*
*борос – боростар      сөгөлдөр – сөгөлдөрҙәр*
*ҡарбуз – ҡарбуздар     кәбеҫтә -кәбеҫтәләр.*
*л) Китап менән эш, дәфтәргә яҙыу өсөнсө күнегеү.*
*Яҙған ваҡытта музыка ҡуйыу .*
*Уҡытыусы: - Ә хәҙер өсөнсө күнегеүҙе дәфтәрҙә эшләйбеҙ, нөктәләр урынына ялғауҙар ҡуйырға кәрәк.*

- *Яҡшы, арыныҡ, әйҙәгеҙ, хәҙер ял итеп алайыҡ.*

*Физкультминутка*
*Аяҡтарың тыпырлат (тыпырлаталар)*
*Ҡулдарыңды сәпелдәт (сәпелдәтәләр)*
*Бер уңға, бер һулға (уңға – һулға сәпелдәтәләр).*
*Ҡыйын эш түгел берҙә.*
*Башың аҫҡа эйеп ал,*
*Ҡул бармағың янап ал*

*Бер бында, бер бында*
*Ҡыйын эш түгел берҙә.*

*Яңы тема өҫтөндә эш.*
*м). Һин нимә ашайһың? Һорауына яуап бирергә өйрәтеү.*
*Еләк – емеш,йәшелсә һалынған кәрзин менән эш.*
*Укытыусы: - Ә хәҙер мин һеҙгә һорауҙар бирәм, һеҙ яуап бирергә тейеш.*
*(Кәрзиндән груша, алма алам да һорауҙар бирәм, алманы ҡулына бирәм).*
*Уҡытыусы: - Айнур, һин нимә яратаһың?*
*Айнур: - Мин алма яратам.*
*Уҡытыусы: - Алма ратҡас, һин алма ашайһың шулаймы? Алма ниндәй?*
*Айнур: - Эйе, мин алма ашайым. Алма ҡыҙыл.*

*-Шулай итеп, беҙ нимә яратабыҙ, шуны ашайбыҙ. Йәшелсәләрҙе үҫтерергә, ашарға кәрәк, сөнки улар беҙҙе дауалай. Һәр бер йәшелсә, емеш файҙалы, витаминға бай. Мәҫәлән, кишерҙә - каротин күп, алмала – тимер кешенең организмына бик кәрәк витаминдар күп.*
*-Беҙҙең Федоровка районында ла йәшелсә үҫтереүселәр бик күп. Мәҫәлән, Сиражетдиновтар ғаиләһе. Яҙ көнө үк беҙ ҡыяр, помидор ашай башлайбыҙ.*

*VI.Яңы теманы нығытыу.*
*1 - се күнегеүҙе эшләү.*

*Уҡытыусы: - Хәҙер, китаптан 1 – се күнегеүҙе ҡарайбыҙ. Сылбырлап бер – береһенә һорау бирәләр.*
*-Ярай, һәйбәт, молодцы.*

*VII.«Гөлназ» йырын йырлау.*
*-Бая әйтеп үткәнемсә, беҙгә Гөлназ тигән ҡурсаҡ ҡунаҡка килгәйне. Ул һеҙҙе ҡарап ултырҙы. Һеҙ бик оҡшанығыҙ уға.*

*Молодцы. Һеҙ үҙегеҙ, Гөлназ тигән йырҙы беләһегеҙ икән. Әйҙәгеҙ, шуны йырлап алайыҡ.*

*VIII. Дәресте йомғаҡлау. Өй эше биреү.*

*105- се бит. шиғырҙы ятларға.*

*Уҡытыусы: - Беҙ бөгөн дәрестә нимәләр эшләнек?*

*Балалар: - Уҡыныҡ, яҙҙыҡ, уйнаныҡ, йырланыҡ.*

*IX. Баһалау.*

- *Миңә һеҙҙең менән дәрес үткәреү бик оҡшаны, һеҙгә ҙур рәхмәт. Бөтәгеҙ ҙә бик әүҙем эшләнегеҙ, бөтәгеҙгә лә “5” билдәләре. Молодцы. Мин һеҙгә бәләкәй генә бүләктәр алып килдем.*
- *Бүләктәр таратыу. Дәрес тамам. Һау булығыҙ.*